Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

***"Йәншишмә" клубы ултырышы**:*

# Татыу ғаилә-ил күрке



*Тәрбиәсе:*

## Татыу ғаилә - ил күрке

**Бала:** Ҡунаҡҡа тип килгәнһегеҙ,

Әйҙә, рәхим итегеҙ.

“Һеҙгә һыйҙарәҙерләйбеҙ,

Бер аҙ ғына көтөгөҙ.

Һыйҙарыыбыҙ тәмле түгел,

Һыйҙарыбыҙ күңелле.

Оҡшап торған берәү ҙә юҡ

Күңелле йыр – бейеүҙе.

Матур – матур шиғырҙар ҙа

Булыр бөгөн һыйыбыҙ.

Һеҙгә байрам бүләк итеү –

Беҙҙең бөтә уйыбыҙ.

Көй аҫтында балалар инә.

**Алып барыусылар:**

Ғаиләм – ҡәлғәм, үҙе серле донъя,

Әйтерһең дә ожмаҡ ҡосағы.

Атай, әсәй – фәрештәләр булһа.

Ә балалар – тылсым эйәһе.

Татыу булһаң, тормош йәмле була.

Аштар тәмле,йәшәү күңелле.

Берҙәм эшләп, гөрләп йәәшәүҙәре

Үҙе оло бәхет түгелме?

**Алып барыусы:**

Башҡортостан президенты Рөстәм Хәмитов Указы менән 2012 йыл “Имен баласаҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы”, тип иғлан ителде. Хөрмәтле ата – әсәйҙәр, бөгөнгө Татыу ғаилә – ил күрке исеме аҫтында “Йәншишмә” ата-әсәләр клубы асыҡ тип иғлан итәбеҙ.

Үҫемлек – тамырҙан, йылғалар – шишмәләрҙән юл алған һымаҡ, кеше тормошо ла тыуған йортонан, атай нигеҙенән башлана. Бала үҫтереү ү борсоулы ла, шул уҡ ваҡытта яуаплы ла бурыс. Күпме ата-әсә балалар баҡсаһына иртә менән үҙенең балаларын алып килә һәм кистәрен һағынып килеп ала.

Бала:

Рәхмәт әйтәм был тынлыҡҡа
Рәхмәт әйтәм илемә.
Рәхмәт әйтәм матурлыҡҡа,
Ҙур рәхмәт ғаиләмә.

Бала.

Беҙ бөтәбеҙ бергә "беҙ",
Шуға күрә "бергәбеҙ."
Шатлыҡ, бәхет менән үҫеп
Бергә- бергә, бергәбеҙ.

**Бейеү** "Батырҙар бейеүе"

**Алып барыусы:**

Ғөрөф – ғәҙәттәр буйынса аралашыу ололарға ихтирам итеүҙән башланған, уларҙың урыны һәр саҡ түрҙә булған. Үҙ сиратында, ололар ҙа үҙ дәрәдәһен төшөрмәҫкә тырышҡан, балалар алдында тыйнаҡлыҡ күрһәткән.

Нисек кенә булмаһын, балаланың үҙенсәлекле булып үҫеүе, холоҡ фиғеле, әхлаҡ нигеҙен үҙләштереүе ҡаиләлә һалына. Кеше бала смағында уйын, тьыуған тел аша кешелек тәғәйенләнешен өйрәнә, социаль көндәрҙе башҡарып ҡарай.

**Йыр** – "Башҡорт телендә һөйләшәм"

**Алып барыусы:** Әсә – атаның бала тәрбиәләүҙәге әһәмиәте тураһында байтаҡ ҡына мәҡәлдәр, әйтемдәр бар: "Ата-инәһенә оҡшап аҡыллы", "Улы атаһына, ҡыҙы әсәһенә оҡшай", Яҡшының балаһы ла яҡшы, ямандың балаһы ла яман".

Ата-әсә менән бала араһындағы бәйләнештең нигеҙендә, береһенең - тәрбиәсе, икенсеһенең – тәрбиәләнеүсе булыуы ята. Ололарҙы ололау тарихҡа тарихҡа ҡыҙыҡһыныу уята, быуындар бәйләнешен нығыта, үҙ милләттең менән ғорурланырға өйрәнә. Тимәк, беҙ яҡшы атай, яҡшы әсәй булырға өйрәнергә тейешбеҙ.

Бала:

*Ерҙәге бөтә әсәләр*
*Оҙон ғүмерле булһын.*
*Бәхет булған һәр бер йортта*
*Йылмайып ҡояш көлһөн.*

**Йыр** “Алтынай.

**Бейеү** “Беләҙегем”

Балалар сығалар, әңгәмәләшеү башлана.